Әлифба дәресе

**Тема** .Ч тартынҡы өнөн тамғалау.Чч хәрефен яҙыу.

**Маҡсат**.. 1.Яңы өн-хәрефте өйрәнеү,| ч | өнөнөң әйтелешен иғтибарлы тыңлау, артикуляцияһын күҙәтеү, шул өн менән һүҙәр туплау, уҡыу, өндөң тамғаһын дөрөҫ яҙырға өйрәнеү.

2.Һөйләү телмәрен үстереү, яңы һүҙәр өҫтөндә эшләү,бала-ла үҙ көсөнә ышаныу тыуҙырыу.

3.Үҙ аллылыҡ, иғтибарлылыҡ тәрбиәләү.

**Йыһаздар**. .һүрәттәр, яҙма хәрефтәр, һүҙәр-таблица.

*Дәрес барышы.*

***I.Ойоштороу моменты.***

Ҡыңғырау шылтыраны,
Ултырабыҙ дәрескә.
Китап, дәфтәрҙәр әҙер
Тотонабыҙ беҙ эшкә.

***II.Артикуляцион, фонетик күнегеүҙәр.***

1.Ирен,тел өсөн күнегеүҙәр.

2.Дөрөҫ тын алыу күнекмәләре.Танау менән тын алып с(тәгәрмәс),ҫ (йылан), ж ( ҡуңыҙ ), ш ( паровоз ) өндәрен сығарыу.

3.Һуҙынҡы өндәрҙе йырлау.

4.Тиҙәйткестәр әйтеү.

Тиҙ әйт, тиҙ әйт
Тиҙерәк, тиҙерәк.
Тиҙ, тиҙ, тиҙ-ти
Тиҙәйткес.

Мейес башында биш бесәй,
Биш бесәйҙең биш башы.
Биш бесәйҙең биш башына
Емерелмәһен мейес ташы.

5.Тартынҡы өндәрҙе әйтеү.

-һаңғырау, яңғырау.

***III.Яңы тема.***

***1)маҡсатҡа сығыу.***

- Балалар, беҙ дәрестә ни эшләрбеҙ икән?Таҡталағы һүрәттәрҙе, моделдәрҙе ҡарап сығығыҙ.Һорау билдәһе ҡуйылған урында бер сер йәшеренгән.Ниндәй сер икән? Тимәк, | ч | өнөнөң тамғаһын төшөрөргә,хәрефен яҙырға өйрәнербеҙ, һүҙәр уҡырбыҙ.







***2) |ч |өнөнөң тамғаһы менән танышыу.***

- Һүрәттә һеҙ кемдәрҙе күрәһегеҙ?(чабан). Һүҙҙең башында ниндәй өн ишетәһегеҙ? | ч | өнө һуҙынҡымы, тартынҡымы? Нисек тартынҡы булыуын белдегеҙ? | Ч | өнө тауыш ярҙамында яһаламы, әллә шау ғына ишетәбеҙме? Шулай итеп, | Ч | өнө һәр ваҡыт нәҙек,һаңғырау тартынҡы.

- Нимәгә оҡшаған был хәреф?

4 һанына оҡшаһа ла
алып та, ҡушып та булмай.
Ч менән 4 һанын безгә
Һис бутарға ярамай.

- Ошо хәрефте алфавиттан табып күрһәтегеҙ? Ниндәй һүҙҙәрҙә | ч | өнө бар? (чемпион, часовой,почта, чабан)

***3) һүҙлек эше.***

- чемпион- беренсе урын, алтын миҙалға лайыҡ булған спортсы
- чабан- һарыҡ көтөүсеһе
- часовой- һаҡта тороусы, һалдат
- врач- Ниндәй врачтарҙы беләһегеҙ?
- почта- гәзит,журнал,хат

***Физминутка***

Бер, ике- беҙ баҫтыҡ, сәп-сәп итеп ҡул саптыҡ.
Аяҡтарҙы бер урында тып-тып-тып итеп баҫтыҡ.
Ултырҙыҡ, ҡабат баҫтыҡ, ултырҙыҡ, ҡабат баҫтыҡ,
Инде бер аҙ хәл алдыҡ, тыныс ҡына ултырҙыҡ.

***IV. Яҙыу дәфтәрендә эш.***

- Хәҙер Чч хәрефен яҙырға өйрәнербеҙ. Тәүҙә һауала яҙып өйрәнәйек.Дәфтәрҙәрҙе асығыҙ, нимә һүрәтен күрәһегеҙ?Әйҙәгеҙ, *ручка* һүҙе менән һөйләм төҙөйөк. Һөйләмдең һыҙмаһын таҡтаға һыҙайыҡ.
- Ҙур Ч хәрефен яҙайыҡ, һуңынан | ч | өнө булған һүҙҙәрҙе яҙырбыҙ.

***Физминутка***

Беҙ яҙҙыҡ, яҙҙыҡ, яҙҙыҡ.
Бармаҡтарҙы талдырҙыҡ.
Хәҙер беҙ ял алабыҙ
Һәм тағы ла яҙабыҙ.



## *V. Үтелгәнде нығытыу.*

- Балалар, һеҙ уйын уйнарға яратаһығыҙмы? Был уйын «Тылсымлы ҡоҙоҡ» тип атала. Ҡоҙоҡтоң ике яғында ике биҙрә тора.Әгәр биҙрәне дөрөҫ төшөрһәгеҙ,ҡоҙоҡ һыу бирер, һыуһыныҒыҙ ҡанғансы эсерһегеҙ. Әгәр яңылышһағыҙ,ҡоҙоҡ асылмаҫта!Ниндәй биҙрәне төшөрөрһөгөҙ?




| | | |
|---|---|---|
| **ВРА** | | |
| **ПЛА** | | |
| **ПО** | | **ТА** |
| **БОР** | | |
| **РУ** | | **КА** |
| **ЛЕТ** | | **ИК** |




- Афарин!Ҡоҙоҡтан һыу алдыҡ, ә «Серле ҡумта»ла нимә йәшеренгән икән?Ҡумтанан һүрәт йәки предметтың үҙен алаһығыҙ ҙа һөйләм төҙөп, һыҙмаһын таҡтаға һыҙабыҙ.( ручка, циркуль, щетка, плащ, врач )
- Хәҙер үҙ алға карточкаларҙы тултырабыҙ.

Форточканы яп!

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Ф | О | р | т | о | | к | а |
| Л | А | м | п | о | | к | а |
| К | И | с | т | о | | к | а |
| К | А | р | т | о | | к | А |

## *V. Дәреслек буйынса эш.*

1) *текст өҫтөндә эш*

- Әлифба китабын асығыҙ,шиғырҙы уҡыйым, иғтибарлы булығыҙ, һуңынан һорауҙарға яуап бирербеҙ

-өлгөлө уҡыу;
-ҡүмәкләп уҡыу
-берәмләп уҡыу
-һорауҙарға яуап биреү

-Шиғырҙа нимә тураһында һүҙ бара?

-Аҡбай ниндәй эштәр башҡара?

-Ә һеҙҙең этегеҙ ниндәй файҙа килтерә?

*VI. Йомғаҡлау.*

- Шулай итеп, бөгөнгө дәрестә нимә өйрәндек, ниндәй серҙе астыҡ? | ч | өнө тураһында нимә әйтерһегеҙ?(нәҙек, һаңғырау тартынҡы) Афарин! Дәрес тамам, сығырға мөмкин.